






Кускильдина Гульфия Шагибаловна

МБДОУ Детский сад №228 городского округа г.Уфы
Республики Башкортостан


Средняя группа №5

# «Домашние животные»







## Дәрестең маҡсаты:

- Йорт хайуандары тураһында белемдәрҙе арттырыу;
- Телмәрҙә төрлө һөйләм төрҙәрен ҡуллана белергә өйрәтеү, һорауға тулы яуап бирергә өйрәнеү;
- Уй, анализлау, йомғаҡлау оҫталығын үҫтереү;
- Йорт хайуандарына хәстәрлек тәрбиәләү һәм өлкәндәргә уларҙы ҡарарға ярҙам итеү;
- Телмәр активлығын үҫтереү.





-Һаумыһығыҙ балалар! Һеҙ мине танынығыҙмы?(Балаларҙың яуабы). Мин хужамдың  фермаһында йәшәйем. Мин әле нығ бәләкәй, шуға күп нимәне белмәйем. Хужа миңә тиҙҙән һинең үҙ өйөң була тине. Барыһы ла һине тыңларға, хатта ҡайһы берәүҙәре ҡурҡырға тейеш тине. Әммә ләкин ни өсөн ҡурҡырға тейештәрен аңламаным



- Әйҙәгеҙ балалар көсөккә ярҙам итәйек. Уның өйө тураһында әҙерәк һөйләп үтәйек. (балаларҙың яуаптары: эт өйө, будка) Балалар, ә һеҙ эттең өйөн нисек  күҙ алдына килтерәһегеҙ?(балаларҙың яуаптары)
- Будка йәки эт өйө баҡсала була. Уны хужа уңайлы итеп төҙөп бирә.

- Балалар эттән кем ҡурҡырға, ә кем этте тыңларға тейеш? Әйҙәгеҙ һөйләп үтәйек



**Фермала кемдәр йәшәй? (кәзә, һыйыр, ат, һарыҡ, тауыҡ, әтәс. Коза, корова.лошадь,овца,курица,петух)**
**Был хайуандарҙы беҙ нисек атайбыҙ? (йорт хайуандары – домашние животные)**
**Йорт хайуандары ҡыр хайуандарынан нимә менән айырыла? (йорт хайуандарының хужаһы бар. У домашних животных есть хозяин )**
**Кем эттән ҡурҡырға тейеш? (кешеләргә зарар килтергән ҡыр хайуандары, эт беҙҙе уларҙан һаҡлай. Собака должна охранят нас от диких зверей)**





Ҡойроғо уралған, теле һалынған. /эт/



Ишек алдында сүмәлә,
Аҫтында дүрт бағана,
Алдында ике һәнәк,
Артында һепертке. /һыйыр/



Хайран уның йөрөүе,
Бик йыраҡтан килеүе,
Ай-һай уның кешнәүе.
Аяғында тимере,
Тамағында күмере,
Ерҙе ярып килеүе. /ат/



Йәйен дә, ҡышын да,
Йылы тунда. /һарыҡ/



Бысраҡ һыуҙа аунай,
Мырҡ-мырҡ, мырҡылдай.
/сусҡа/





**Бик оҙон мыйыҡтары,**
**Күҙҙәре янып тора.**
**Сыҫҡандарҙы аулар өсөн**
**Туҡтауһыҙ хәйлә ҡора. /бесәй/**



**Мин барыһын уятам,- тип**
**Ҡысҡыра,-кикирикүүүк!**
**Бара торған ерегеҙгә**
**Һуңлап ҡуймағыҙ берүк!**
**Һис кәрәк түгел бәхәс,**
**Был булыр инде … . /әтәс/**



**-Ҡыт-ҡытыҡ,-ти,-ҡытыҡ,-ти,-**
**Тибенеүе ҡыҙыҡ,-ти,**
**Әйтеп ҡуймағыҙ яҙыҡ,**
**Әлеге ҡош ул-… . /тауыҡ/**

**Ә хәҙер балалар ҡулдарҙы, аяҡтарҙы ял иттереп алайыҡ**

***Беҙ, беҙ, беҙ генә,***
***Бармағыбыҙ төҙ генә,***
***Ҡул- ҡанатты ҡағабыҙ,***
***Сәпәкәйләп алабыҙ.***
***Билдән артҡа бөгөләбеҙ,***
***Шунан инде сүгәбеҙ.***
***Тағы ҡанат ҡағабыҙ,***
***Тәрән һулыш алабыҙ,***
***Ултырабыҙ шым ғына***
***Һәм уҡыйбыҙ тын ғына.***



**«Кем ҡайҙа йәшәй» уйыны**

**Һыйыр ҡайҙа йәшәй? Где живет корова? (Һыйыр һарайҙа йәшәй. Корова живет в коровнике).**
**Сусҡа ҡайҙа йәшәй? Где живет свинья? (Сусҡа һарайҙа йәшәй. Свинья живет в свинарнике).**
**Ат ҡайҙа йәшәй? Где живет лошадь? (Ат ат һарайында йәшәй. Лошадь живет в конюшне).**
**Кәзә ҡайҙа йәшәй? Где живет коза? (Кәзә һарайҙа йәшәй. Коза живет в хлеву).**
**Бесәй ҡайҙа йәшәй? Где живет кошка? (Бесәй өйҙә йәшәй. Кошка живет в доме).**
**Эт ҡаәҙа йәшәй? Где живет собака? ( Эт эт ояһында йәшәй. Собака живет в конуре).**
**Тауыҡ ҡайҙа йәшәй? Где живет курица? (Тауыҡ тауыҡ ояһында йәшәй. Курица живет в курятнике).**
**Һарыҡ ҡайҙа йәшәй? Где живет овца? (Һарыҡ һарайҙа йәшәй. Овца живет в овчарне).**



Уйын

Балаларын тап!





- Балалар миңә ҡайтырға ваҡыт етте. Хужам мине көтәлер. Минең өйөм ниндәй буласаҡ? (будка, эт ояһы). Ни өсөн ҡайһы берәүҙәре минән ҡурҡасаҡ? (Сөнки көсөк тиҙҙән эт буласаҡ һәм өйҙө, йорт хайуандарын ҡыр хайуандары, дошмандарҙан һаҡлайасаҡ. Скоро щенок станет собакой и будет охранят дом и домашних животных от врагов и диких животных).

- Миңә ҡайтырға ваҡыт етте, балалар. Һеҙ миңә бик ныҡ ярҙам иттегеҙ. Мин хәҙер һарайҙа йәшәгән бөтөн йорт хайуандарын беләм. Һеҙгә ҙур рәхмәт. Һау булығыҙ, балалар!



1. https://yandex.ru/images/search?from=tabbar&text=%D0%B4%D0%BE%D0%BC%D0%B0%D1%88%D0%BD%D0%B8%D0%B5%20%D0%B6%D0%B8%D0%B2%D0%BE%D1%82%D0%BD%D1%8B%D0%B5%20%D0%B3%D0%B8%D1%84
2. Нафикова З.Г., Азнабаева Ф.Г. «Оскон»
3. https://www.yandex.ru/search/?text=%D0%BA%D0%B0%D1%80%D1%82%D0%B8%D0%BD%D0%BA%D0%B0+%D1%81%D0%BE%D0%B1%D0%B0%D0%BA%D0%B8&lr=172


# Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!

